**“Яҙ килде” темаһына ойошторолған белем биреү эшмәкәрлеге**
**Икенсе кескәйҙәр төркөмө “Кояшкай”**

Төҙөүсе: Сафина Ю.Ю.

**Маҡсаттар: Белем биреүсе:** яҙ тураһында балаларҙың белемдәрен киңәйтеү. Тәҡдим ителгән тема буйынса эҙмә-эҙлекле, тулы һөйләм төҙөп, мнемотаблицаға ҡарап һөйләү һәләтен булдырыу.
**Үҫеш маҡсаттары:** телмәр, иғтибарлылыҡ һәләтен үҫтереү, хәтер, фекерләү ҡеүәһен арттырыу.
**Тәрбиәүи маҡсаттар:** тәбиғәткә, тирә-йүнгә ҡарата һаҡсыл ҡараш, һоҡлана белеү тойғоһо тәрбиәләү.
**Атрибуттар:** сюжетлы һүрәт “Яҙ килде”, мнемотаблица.
**Һүҙлек эше:** яҙ килде, ҡар ирей, гөрләүектәр аға, яҡ миҙгелен яратам.
**Дәрес барышы.**
**Тәрбиәсе:** балалар, тыңлағыҙ әле бер йомаҡ:
Ҡарҙар ирей, һыуҙар таша, көндәр оҙоная, төндәр ҡыҫҡара был ҡасан була?
**Балалар:** яҙ миҙгеле.
**Тәрбиәсе:** дөрөҫ, яҙ миҙгеле. Ә ҡайҙан белдегеҙ?
**Балалар:** ҡыйыҡтан тамсылар тама, ҡояш нығыраҡ яҡтырта, ҡара ҡарғалар килде.
**Тәрбиәсе:**эйе, тәбиғәттең матур айы—яҙ етте. Бар тереклек йоҡонан уяна. Әйҙәгеҙ, яҙ тураһында өйрәнә башлаған шиғырыбыҙҙы иҫкә төшөрөп үтәйек әле:

Ҡарҙар ирей, һыу таша,
Талдар бөрөһөн аса.
Эх, күңелле яҙ килә
Ҡояш нурҙарын һибә.

**Тәрбиәсе:** әйҙәгеҙ, бер аҙ ял итеп алайыҡ!
**Ял минуты:**

Аяҡтарыбыҙ топ-топ, топ-топ,
Ҡулдарыбыҙ сәп-сәп, сәп-сәп.
Ҡулды ҡуйып бөйөргә
Тотонабыҙ бейергә.

**Тәрбиәсе:** хәҙер таҡталағы мнемотаблица буйынса хикәйә төҙөп ҡарайыҡ. **Яҙ килде. Йылы яҡтан ҡоштар ҡайта. Йылы елдәр иҫә. Ямғыр яуа. Гөрләүектәр аға. Мин яҙ миҙгелен яратам.** (бер нисә бала таҡтаға сығып мнемотаблица буйынса һөйләп ишеттерә. Аҙаҡ тағы бер тапҡыр бергәләп һәйләп нығытып ҡуялар**).**
**Тәрбиәсе:** Йылы яҡтан ҡоштар ҡайта тинек. Ә ҡайһы ҡош беренсе булып осоп ҡайтып беҙгә яҙ килтерә әле?
**Балалар:** ҡара ҡарғалар.
**Тәрбиәсе:** Дөрөҫ, ҡара ҡарға**.** Хәҙер ҡарға тураһында бармаҡ уйыны уйнап алайыҡ әле! Һүҙҙәрен бергәләп ҡабатлайбыҙ:

Бутыр-бутыр бутҡа бешә,

Ҡарға бутҡа бешерә.
Баш бармаҡ әйтә:
-Әйҙә, бутҡа бешерәйек.
Имән бармаҡ әйтә:
Утын ҡайҙан алайыҡ?
Урта бармаҡ әйтә:
-Күршенән алып торайыҡ.
-Бурысты нисек түләрбеҙ?
Сәтәкәй бармаҡ әйтә:
-Ашайыҡ та ҡасайыҡ!

**Тәрбиәсе:** Ә яҙҙың тәүге сәскәһе ниндәй?
Балаларҙың яуаптары.
**Тәрбиәсе:** Ҡарҙы тишеп, һыуыҡтан ҡурҡмаған яҙҙың тәүге сәскәһе—умырзая тип атала.
(Балаларға умырзая сәсәкәһе һүрәте күрһәтелә).
**Йомғаҡлау.** Бөгөн беҙ ниндәй миҙгел тураһында һөйләштек? Әйҙәгеҙ, бергәләп яҙ билдәләрен иҫкә төшөрөп, һынап үтәйек.
**Балаларҙың яуаптары:** ҡояш ҡыҙҙыра, йылыта, ҡарҙы иретә, тамсылар тама, ҡоштар ҡайта, умырзая сәсәкә ата һ.б.